КОНТРОЛЬНЫЙ
ЭКЗЕМПЛЯР

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙары, берләшегеҙ!

Хеҙмәт байрағы

Газета 1931 йылдың 1 ноябренән сыға | Башҡорт АССР-ы КПСС-тың Хәйбулла район комитеты һәм халыҡ депутаттарының район Советы органы

№ 106 (6389) 1987 йыл, 5 сентябрь, шәмбе Хаҡы 3 тин.

МОЛНИЯ

„Маҡан" совхозының алдынғы комбайнеры Ғиззәт Кәипов урак башынан алып СК-6 комбайны бункерынан 7312 центнер иген бушатты.

Ошо уҡ хужалыҡтан механизатор Виктор Васильевич Кулик К-701 тракторы менән көн һайын нормалағы 18,5 урынына 35 гектар майҙанда туңға һөрә.

Урып йыйыуға темп һәм сифат!

Урак-87

ЭШ ДАУАМ ИТӘ

«Хәйбулла» совхозында урак тамамланып килә. Йыш яуған ямғырҙар эште тотҡарлай, әлбиттә, шуға күрә хужалыҡ игенселәре һәр аяҙ көндө, һәр сәғәтте тулыһынса файҙаланырға тырыша.

Болоттар араһынан ҡояш күренеү менән комбайндар, машиналар юлға сыға, ырҙын табағында ла эш башлана.

Иван Андреевич Исаков (һулдағы һүрәттә) күп йылдар инде шофер булып эшләй. Йыл һайын үҙенең прицеплы ЗИЛ-554 автомашинаһы менән ураҡта актив ҡатнаша. Быны быйыл да ул үҙенең ғаилә звеноһы составында эшләй. Ул үҙенең ҡустыһы М. А. Исаков, энеләре Андрей менән Николайҙың комбайндарын хеҙмәтләндерә.

Бөгөнгө көндә И. А. Исаков алдынғылар иҫәбендә. Ул баҫыуҙан Үҙәк бүлексәнең ырҙын табағына бөтәһе 855 тонна иген ташыған.

Ырҙын табағында иген оҙаҡ ятмай. Шунда уҡ эшкәртелә, таҙартыла, шунан һуң Сибай элеваторына оҙатыла. Хужалыҡта орлоҡ һалыу тураһында ла онотмайҙар. Бөгөнгө көндә складтарға планда билдәләнгән орлоҡтоң 93 проценты, йәки планлаштырылған 2590 тоннаның 2410 тоннаһы һалынған. Совхоз игенселәре арпа, борсаҡ һәм һоло орлоғон етерлек ҡиммәлдә әҙерләгән, 300 тоннаға яҡын бойҙай орлоғо һалаһы ҡалған. Һалынған 300 тоннаға яҡын «Безенчукская-139» ҡаты бойҙай орлоғо 1-се класлы. 500 тонна арпа һәм 130 тонна борсаҡ орлоғо ла сәсеү кондицияһына еткерелгән.

Үҙәк бүлексәнең ырҙын табағындағы механизмдарҙы бер аҙ үҙгәртеп ҡороу һөҙөмтәһендә сифатлы, кондициялы орлоҡтар алырға мөмкин. Ике ЗАВ-40 ҡоролмаһы бик иҫкергән, шуға күрә яҡшы сифатлы орлоҡ алыу өсөн, игенде агрегат аша ике тапҡыр үткәрергә тура килә. Былтыр көҙ һалынған орлоҡто ҡыш тағы бер тапҡыр эшкәртергә, уны сәсеү кондицияһына еткерергә тура килде. Быйыл иһә бындай хәл ҡабатланмаясаҡ.

Ф. Мицлеханова, В. Иванова һәм М. Исмәғилевалар (һүрәттә) урак башынан алып ырҙын табағында эшләйҙәр. Уларҙың иҫәбендә бер нисә тонна таҙартылған иген.

В. ДАНИЛОВ.

Р. БАЙМУРЗИН фотолары.

Репортаж

Мөмкинлектәрҙе тулыһынса файҙаланып

Болотло, ямғырлы 3 сентябрь көнө «Таналыҡ» совхозының Савельевка бүлексәһе ырҙын табағында эшселәр ғәҙәттән тыш күп булды. Хужалыҡтың үҙәк усадьбаһы белгестәре, башҡалар менән бер рәттән, ырҙын табағына эшләргә килгән. Улар иген эшкәртеүҙә, машиналарға тейәүҙә ҙур ярҙам күрһәтә. Белеүенсә, бындай өмәләр йыш ойошторола икән. Мәҫәлән, үткән шәмбе көндө совхоздың баш белгестәре ошо уҡ ырҙын табағындағы складтың ҡыйығын япҡандар.

Электр энергияһы биреү туҡталғанлыҡтан, эшселәр бер аҙ ял итеп алырға ҡарар итә, һәм мин, шул уңайҙан файҙаланып, совхоздың баш агрономы Иван Иванович Норецтан урып йыйыу эштәре барышы тураһында һораштым.

— Таштуғай һәм Бакаловка бүлексәләрендә иген культураларын йыйыу тамамланды, — тип һөйләне ул. — Ундағы техникалар Әҙел бүлексәһенә ярҙамға ебәрелде. Улар 1000 гектар майҙандың уңышын йыйып алмаған әле. Үҙәк бүлексәлә 630 гектар ҡалды. Бында уңыш юғары булыуға ҡарамаҫтан (һәр гектарҙың төшөмө 16,8 центнер тәшкил итә), эштәр ҡәнәғәтләнерлек алып барылмай. Төп сәбәп — хеҙмәт насар ойошторолған. Бакаловка һәм Савельевка бүлексәләре игенселәрен башҡаларға өлгө итеп ҡуйырға мөмкин. Улар араһында уңған комбайнерҙар бар. Мәҫәлән, Бакаловка бүлексәһенән Ишбулды Әбделмәнов иген һуғыу буйынса алты меңселәр рубежын яулаңы. Бергә эшләгән иптәше Валерий Чабановтың һөҙөмтәһе — 5900 центнер.

СПОГАТ шоферҙары иген ташыуҙа ҙур ярҙам күрһәтә. Күп йөк һыйҙырышлы прицеплы «КамАЗ» шоферҙары Хәликов менән Йәһүҙиндар, совхоз шоферҙары К. Фәйзуллин, С. Вәлинуров, ЗАВ агрегаттарын хеҙмәтләндереүсе К. Фәйзуллин менән Р. Рәсембәтовтар арымай-талмай эшләйҙәр.

«Таналыҡ» совхозы эшсәндәре дәүләт бураларына 45430 центнер иген оҙатҡан. Һәр гектарҙан 13,7 центнер уңыш алып, бөтәһе 125560 центнер иген йыйып алынған. Совхоздың Савельевка бүлексәһендә һәр гектарҙан 16,9 центнер уңыш алыуға өлгәшәләр.

Туңға һөрөү көндән-көн ҡыҙа бара. Новоукраинка һәм Бакаловка бүлексәләрендә был эш яҡшы ойошторолған. Бөтәһе 350 гектар майҙан һөрөлгән.

М. КҮСӘКОВ.

Был номерҙа:

ПАРТИЯ ТОРМОШО. ЯҠШЫ ҺӨҘӨМТӘЛӘРГӘ ИРЕШӘЛӘР — 2-се биттә.
ЮҒАЛТЫУҘАРҒА ЮЛ ҠУЙЫЛА, АШЛАМАНЫҢ СИФАТЫ КӘМЕЙ — 3-сө биттә.
ҺАУМЫ, МӘКТӘП! — 4-се биттә.

◆ БОРСОУЛЫ СИГНАЛ!

Борсаҡ ҡуңғыҙы

Бөгөнгө көндә районыбыҙҙың бөтә хужалыҡтарында 10 мең центнер йәки тейешле күләмдә борсаҡ орлоғо һалынған. Ләкин был орлоҡтарҙы борсаҡ ҡуңғыҙына ҡаршы метахлорид менән эшкәртергә кәрәк.

Был ҡуңғыҙға ҡаршы көрәш 12 градустан да түбән булмаған йылы көндәрҙә үткәрелергә тейеш. Башҡа осраҡтарҙа бындай эшкәртеү кәрәкле эффектты бирмәйәсәк. Был турала хужалыҡтарҙың орлоҡсолоҡ буйынса агрономдары яҡшы белә, ләкин шуныһы аңлашылмай, ни өсөн дөр улар был сараны үткәреүҙе һуҙа, һалҡындар килеүен көтә. Ни өсөн баҫыу эштәре туҡтап торған ямғырлы көндәрҙе файҙаланмаҫҡа? Был ваҡытта орлоҡ һалынған складтарҙа эште ойошторорға мөмкин бит.

Ә. БАЙҒУСҠАРОВ.

ДӘҮЛӘТКӘ — СИФАТЛЫ ИГЕН

Район колхоздары һәм совхоздары тарафынан дәүләткә тапшырылған игендең 15500 тоннаһы, шул иҫәптән 11460 тонна бойҙай һәм 4040 тонна арпа Хәйбулла иген ҡабул итеү пункты складтарына һалынған.

Дөйөм алғанда бөтә хужалыҡтар ҙа яҡшы, таҙа продукция тапшыра.

Ә бына дымлылығы буйынса төрлөсә була. Ҡороһо ла, еүеше лә бар. Тағы, әлбиттә, йыш ҡына яуып торған ямғырҙар тәьҫир итә. 7400 тоннанан ашыу иген ҡабул итеү пунктына дымлы килеш тапшырылды. Беҙ уны иген киптергес аша үткәрәбеҙ. Шундай ике машина тәүлек әйләнәһенә эшләй. Уларҙың үткәреү һәләтлеге сәғәтенә 32 тонна.

Килтерелгән бөтә игендең 10587 тоннаһы көслө бойҙай. Уны «Таналыҡ» һәм «Аҡъяр» совхоздары күберәк күләмдә тапшырҙы.

Дөрөҫ, еүешлек юғары булыу арҡаһында игендең сифаты түбән. Һуңғы ваҡытта ҡайһы бер хужалыҡтарҙан ҡабул итеү пунктына тапшырылған иген араһында шытҡандары ла бар. Ул бер проценттан юғары булһа, өҫтәмә түләү 30 урынына 10 процентҡа тиклем кәмей. Мәҫәлән, Калинин исемендәге колхоздан 4 процентҡа тиклем шытҡан иген булған 70 тонна, «Аҡъяр» совхозынан — 10,8 тонна (2 процент), «Матрай»ҙан 42 тонна (3 процент) килтерелде.

Ырҙын табаҡтары етәкселәре, белгестәре һәм бөтә эшселәренең иғтибарын ошоға йүнәлтергә теләйбеҙ. Ҡабул итеү пунктына ебәреү өсөн игенде машиналарға ҡарамайынса тейәйҙәр. Контроль яҡшы булғанда шытҡан игенде хужалыҡта ҡалдырырға мөмкин бит. Уйлап еткермәй эшләү арҡаһында күпме аҡса юғалтыла.

Р. ШЕКЕМОВА,
иген ҡабул итеү предприятиеһының лабораторияһы мөдире.

Партия тормошо

КОММУНИСТАР — МАЛСЫЛЫҠТА

Бөйөк Октябрҙең данлы юбилейына көндән-көн яҡынлашабыҙ. Ошо датаға ҡарата районыбыҙ малсылары, фермалар, звенолар, бригадалар араһында социалистик ярыш киң йәйелдерелде. Күптәр был көнгә үҙҙәренең шәхси йыллыҡ йөкләмәләрен үтәргә ҡарар итте. Коммунистар һәр ваҡыт малсылыҡ продукцияларын етештереүҙе арттырыу өсөн барған көрәштә хеҙмәт коллективы башында килә. Улар, үҙҙәренең бөтә көсөн, белемен һәм күңел йылыһын партия эшенә биреп, партия ҡушҡанса, коммунистарса намыҫ менән хеҙмәт итә.

Социалистик Хеҙмәт Геройы, СССР Верховный Советы депутаты К. С. Сөләймәнов «Таналыҡ» совхозында оҙаҡ йылдар малсы булып эшләй. Хәҙер ул Новоукраинка һөтсөләк фермаһы менән етәкселек итә. Был коллективтың малсылары тулайым һөт етештереү буйынса районда беренсе урында бара. Бында йыл башынан алып һәр һыйырҙан йөкләмәләге 2750 урынына 2294 килограмм һөт һауыуға өлгәшкәндәр.

Социалистик ярыш дөрөҫ ойошторолһа, ул үҙенә хеҙмәтсәндәрҙең киң массаһын йәлеп итһә, коллектив өсөн ҙур файҙа килтерә. «Новый путь» колхозында һауынсылар Р. М. Вәлиева менән А. П. Слащева социалистик ярыш башында килә. Октябрҙең юбилейын лайыҡлы ҡаршылау өсөн хеҙмәт вахтаһына баҫып, уларҙың тәүгеһе йылына һәр һыйырҙан 3200, ә икенсеһе 3150 килограмм һөт һауырға йөкләмә алды. Тырышып эшләү, малдарҙы тәрбиәләүҙең бөтә зоотехния алымдарын күҙәтеү һөҙөмтәһендә билдәләнгән маҡсаттарына ирешергә ынтылалар. Һигеҙ айҙа улар һәр һыйырҙан 2166—2225 килограмм һөт һауып алды.

КПСС ағзаһы Т. З. Италмасова тураһында район гәзитәһы биттәрендә бер нисә тапҡыр яҙылып сыҡты. Ул оҙаҡ йылдар инде Калинин исемендәге колхоздың Переволочан малсылыҡ фермаһында эшләй. Быйыл күҙ алдынғы һауынсыны профилакторийға быҙау ҡараусы итеп күсерәләр, сөнки хужалыҡта йәш малдарҙы һаҡлау мәсьәләһе бик ҡыҫкенләшә. Бергә эшләгән эхирәте, шул ваҡытта бригаданың тәүге комсомол ойошмаһы секретары вазифаһын башҡарған М. Ш. Байғужина менән берлектә улар яңы тыуған 60 быҙауҙы һаҡлап алып ҡалалар. Ул ғына түгел, ә тәүлегенә бер килограмм артым алыуға өлгәшәләр. Хәҙер эхирәттәр һауынсы булып бик һәйбәт эшләйҙәр. Был ферма менән коммунист Н. М. Калита етәкселек итә, ул производствоны яҡшы ойоштороусы, йәштәрҙең яҡын ярҙамсыһы булып иҫәпләнә.

«Уңыштың нигеҙе — тырышлыҡта», — тип халыҡ юҡҡа ғына әйтмәй. Фрунзе исемендәге колхозда сусҡасылыҡты үҫтереүҙә ҡыйынлыҡтар күп була. Был тармаҡ бер мәл бөтөнләй бөтөрөлә. Ләкин яңынан ойоштороло. Бөгөнгө көндә хужалыҡта сусҡасылыҡ фермаһының эше насарҙан түгел. Ғәнлә звеноһының береһе менән коммунист А. А. Таулыҡаева етәкселек итә. Төркөмдә 115 сусҡа аҫырала. Тәүлегенә уртаса 340—350 грамм артым алына. Башҡа хужалыҡтар менән сағыштырғанда был әлегә юғары күрһәткес түгел. Ирле-ҡатынлы Таулыҡаевтар тағы ла юғарыраҡ артым алыу өсөн тырыша.

Коммунистар эшләгән малсылыҡ участкаларында хеҙмәт коллективы ағзаларының партия йоғонтоһо һиҙелерлек юғары, һәм эш һөҙөмтәләре лә яҡшы була. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ҡайһы бер хужалыҡтарҙа быға етди иғтибар бирелмәй. Шундай миҫалды ҡарап үтәйек. Коммунист Ғ. Н. Күскилдин «Һаҡмар» колхозының Бәләкәй Арыҫлангол фермаһының һауын гуртында мал ҡараусы булып эшләй. Бында һәр һыйырҙан тәүлегенә уртаса 9 килограмм һөт алына. Ә йөкләмә буйынса 15—16 килограмм булырға тейеш. Ни өсөн улай? Сәбәбе — үләндәр кибә, малдарға ваҡытында өҫтәмә йәшел аҙыҡ бирелмәй. Коммунист Күскилдин был турала уйларға һәм хәстәрлек күрергә тейеш ине.

Бөйөк Октябрь юбилейына тиклем һанаулы көндәр ҡалды. Хәҙергә күп кенә малсылыҡ коллективтары заданиеларын үтәй алмай әле. Шуға күрә, һәр коллектив ҡабул иткән йөкләмәләрен һис һүҙһеҙ үтәһен өсөн, партия ойошмалары ойоштороу, масса-аңлатыу эшенә ныҡлы иғтибар бирергә тейеш.

И. ҠОҘАБАЕВ.

Хеҙмәт дисциплинаһын нығытырға

Яуаплылыҡ тойғоһо менән

Ураҡ осоронда ауыл эшсәндәренең хәстәрлектәре икеләтә арта. Комбайнерҙар баҫыуҙағы ашлыҡты тиҙерәк йыйып алырға, ырҙын табағы работниктары игенде эшкәртеп, дәүләт бураларына оҙатырға, орлоҡ һалырға ашыға. Был көндәрҙә малсылыҡ фермаларына иғтибар бер ни тиклем кәмей. Базаларҙы ремонтлау, малсыларҙың хеҙмәте колхоз идараһы контроленән ситтә ҡала. Һөҙөмтәлә хужалыҡҡа күп кенә зыян килтерелә.

Ләкин быларҙың барыһы ла «Красное знамя» колхозының халыҡ контроле группаһы председателе коммунист И. Ф. Сахноның күҙ уңынан китмәй. Бай тормош тәжрибәһе, үҙ эшен яҡшы белеүе халыҡ контролерына кәмселектәрҙе күреүҙә булышлыҡ итә. Бер саҡ ул һарыҡ көтөүенең төнгөләккә иртә бикләнеүен һиҙеп ҡала. Бының өсөн Иван Федорович бик борсола һәм чабандар менән һөйләшергә ҡарар итә. Тураһы менән иптәштәрсә ентекле һөйләшкәндән һуң чабандар эш көнө тәртибен күҙәтә башлайҙар, һарыҡтарҙы көтөү ваҡыты һиҙелерлек оҙайтыла.

Калинин исемендәге колхозда йәмәғәтселек башланғысындағы контролер-сифатсы Ҡ. Ә. Дәүләтбирҙин үҙ вазифаһын башҡарыуға етди ҡарай. Ул баҫыуҙағы комбайнерҙарҙың эшен генә тикшереп ҡалмай, ырҙын табағындағы эштәрҙең нисек башҡарылыуын да күҙ уңында тота. Байғусҡар һигеҙ йыллыҡ мәктәбе янында ойошторолған «Йәш контролер» посы ағзалары уға бик ҙур ярҙам күрһәтә. Пост эше менән 6-сы класс уҡыусыһы Люциә Ғәббәсова етәкселек итә.

Йәш дозорныйҙар көн һайын үлсәгестә берәр сәғәт дежурҙа була. Һәр төркөмдә ике кеше. Улар комбайндарҙан иген тейәп килгән һәм дәүләт бураларына иген ташыусы автомашиналар кузовтарының нисек герметизацияланыуын тикшерә. Мәҫәлән, йәш контролерҙар Стәрлетамаҡ автоколоннаһы шоферы Ф. Мурасовтың автомашинаһы кузовынан иген ҡойолоуын асыҡланы. Был башҡа шоферҙарға ла иҫкәртеү булһын өсөн «Борсоулы сигнал» листогы сығарылды. Уҡыусыларҙың ураҡ осорондағы ярҙамы файҙалы башланғыс ҡына әле, уларҙың эшмәкәрлеге артабан киңәйәсәк.

Колхоздың ете халыҡ контроле ағзаһы ла алдан төҙөлгән план буйынса эшләй. Ағымдағы йылдың икенсе яртыһына саралар билдәләгәндә группа председателе Ғ. Баймурзин бөтә мәсьәләләрҙе иҫәпкә алған. Ул йәмәғәт малдары өсөн етерлек күләмдә аҙыҡ әҙерләүҙе, урып йыйыу эштәрен уңышлы башҡарыуҙы, малсылыҡ биналарын ҡышҡылыҡҡа әҙерләүҙе, техниканы һаҡлауға ҡуйыуҙы иң мөһим мәсьәләләр тип иҫәпләй. Һәр участкаға халыҡ контроле группалары ағзалары иҫәбенән яуаплы кешеләр билдәләнгән. Улар планды тормошҡа ашырыуҙа ҙур тырышлыҡ күрһәтә.

Халыҡ контролеры — кешеләрҙең ышаныслы ярҙамсыһы ул. Уларҙың һәр береһенә хеҙмәт коллективы ағзалары ҙур ышаныс күрһәтә. Улар партия ойошмаһы заданиеһын үтәй.

Р. ХОҘАИБИРҘИН,
район халыҡ контроле комитеты председателе.

Советса йәшәү өлгәһе

ТЫНЫСЛЫҠ ФОНДЫНА

110-сы ауыл профессиональ-техник училищеһы курсанттарының контингенты йылдан-йыл арта. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә училище йөҙләгән юғары квалификациялы киң профилле механизаторҙар, газоэлектросварщиктар һәм теҙәүселәр әҙерләп сығарҙы. Курсанттарҙы үҙ һөнәрҙәрен белгән уҡытыусылар, инженер-техник работниктар уҡыта.

1 сентябрҙә училищела яңы уҡыу йылы башланды. Парталар артына ултырырҙан алда курсанттар һәм уҡытыусыларҙың тантаналы линейкаһы булып үтте. Уҡыу отличниктары, икенсе курс уҡыусылары Юлай Асҡаров һәм Айнур Сынбулатовҡа флаг күтәреү хоҡуғы бирелде. Советтар Союзы Гимны яңғырай.

Училище директоры Д. М. Рыбаков ҡыҫҡаса инеш һүҙ менән тантаналы линейканы асып ебәрҙе. Агропромышленность комплексы работниктары профсоюзы райкомы секретары В. И. Овчинников, һуғыш һәм хеҙмәт ветераны Т. А. Яницкий бында ҡатнашыусыларҙы яңы уҡыу йылы менән ҡотланы. «Аҡъяр» совхозының кадрҙар бүлеге начальнигы Л. А. Осипова һәм «Новый путь» колхозының партия комитеты секретары И. Ө. Йәтимов үҙ коллективтары исеменән ауыл хужалығы эштәрендә үҙҙәрен яҡшы яҡтан күрһәткән курсанттарға Почет грамоталары тапшырҙы.

Һуңынан курсанттар һәм уҡытыусылар район культура йорто янындағы В. И. Лениндың һәйкәленә сәскәләр һалды.

Сәғәт ун берҙә һәр уҡыу группаһында «каһарманлыҡ» дәресе үткәрелде. Был дәрестәрҙә уҡытыусыларҙан тыш, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары Иван Васильевич Бухалов, Ҡасим Аҡмалович Таулыҡаев, Тихон Андреевич Яницкийҙар ҡатнашты.

Ошо уҡ көндө хеҙмәт семестры кәнә үткәрелде. Курсанттарҙың ҡайһы берҙәре СПТУ-ның яңы базаһы төҙөлөшөндә, ә бер өлөшө 3-сө төҙөлөш участкаһында эшләне.

Булып үткән педсоветта уҡытыусылар һәм инженер-техник работниктар был көндө эшләп алған средстволарҙы Тыныслыҡ фондына күсерергә ҡарар итте.

ҺҮРӘТТӘ: училищеның профком председателе Мәрйәм Дәүләтбаева Фрунзе исемендәге колхоз идараһы исеменән курсант Альберт Хәйбуллинға Почет грамотаһы һәм ҡиммәтле бүләк тапшыра.

В. УСМАНОВ фотоһы.

Иғтибар итегеҙ: ҡыҙыҡлы тәжрибә

ҠАТЫН-ҠЫҘҘАР СОВЕТЫ: АКТИВ ПОЗИЦИЯ

Эсергә яратыусылар ғына түгел, ә уларға спиртлы эсемлектәр һатҡан сауҙа работниктары ла Тажик ССР-ы Ленинский районы «Ленинград» совхозының ҡатын-ҡыҙҙар советы ултырышына килергә персональ саҡырыу ҡағыҙы алды. Ауыл активистары урындағы райпо етәкселәренә ҡарата бик күп асыулы, әммә ғәҙел үпкә һүҙҙәре әйттеләр. Аҙыҡ-түлек магазиндарында ҡайһы саҡта иң кәрәкле продукттар булмай, уның ҡарауы спиртлы эсемлектәр менән һатыу итеүҙә өҙөклөктәр булғаны юҡ. Байрамдарҙа ғына түгел, ә эш көндәрендә лә кәйеф-сафа ҡороп ултырыусылар менән тулы булған ауыл сәйхана-ашханаһын да улар яуызлыҡ үҙәге тип атанылар.

Ҡатын-ҡыҙҙар советы башлап ебәргән һөйләшеү Зайнабабад поселок Советы халҡының ауыл сходында дауам итте. Яҡташтарҙың фекере бер булды — эскеселәрҙе административ яуаплылыҡҡа тарттырырға, ә поселок Советының бөтә территорияһында спиртлы эсемлектәр һатыуҙы тыйырға.

Ауыл йәмәғәтселеге яҡташтарының сәләмәт, айыҡ көнкүрешен раҫлау өсөн алып барған килешмәүсән көрәштә ҡатын-ҡыҙҙар советы актив позиция алып тора. Энтузиасткаларҙың ныҡышмалылығы арҡаһында дөйөм туҡланыу берекмәһенең элек эсемлектәр һатыу нөктәһе йәштәр кафеһы итеп үҙгәртелде — алкоголһеҙ комсомол туйҙары, армияға оҙатыу, башҡа тантаналарҙы үткәреү урынына әйләнде. Ҡатын-ҡыҙҙар советы ағзалары ата-әсәләре эскелек менән шөғөлләнгән насар ғаиләләр өҫтөнән шефлыҡ итеүҙе үҙ өҫтәренә алды. Самогон ҡайнатыуҙың һәр бер осрағы ла активисткаларҙың иғтибарынан ситтә ҡалмай.

— Эскелеккә ҡаршы ҡаты көрәш алып барып, активисткалар ауылдаштарының ялын ҡыҙыҡлы һәм йөкмәткеле итеп ойоштороуға ҙур ҡыҙыҡһыныу күрһәтәләр, — ти Зайнабабад поселок Советы башҡарма комитеты председателе М. Тохиров. — Улар депутаттар менән берҙәләп эшләй. Ҡатын-ҡыҙҙар советы председателенең үҙе, колхоз төҙөлөшө ветераны Х. Туранова, мамыҡ үҫтереүселәрҙең танылған бригадиры Х. Әлиева һәм башҡалар төрлө нәмәләр уйлап сығарыуға бик оҫта.

Күмәк халыҡ уйындары, иң яҡшы ихата өсөн смотр-конкурстар, «Кемдең быҙауы тәмлерәк» конкурстары, бесән башланыу осоронa тура килгән яҙғы тюльпан байрамы, башҡа байрамдар халыҡта айырыуса популярлыҡ менән файҙалана. Актив ял һәм айыҡ йәшәү рәүеше совхоздың экономикаһына ла ыңғай йоғонто яһаны — күп йылдар эсендә малсылыҡ тәү тапҡыр рентабелле булып әүерелде.

Б. ЗАИРОВ,
ТАСС хәбәрсеһе.
Тажик ССР-ы,
Ленин районы.

Тиҙ һәм сифатлы

«Степной» совхозында мал аҙығы әҙерләү дауам итә. Күп көс хәҙер силос һалыуға йәлеп ителгән.

Хужалыҡта силос культуралары барлығы 600 гектар ерҙә урынлашҡан, шуның күп өлөшө йыйып алынған һәм траншеяларға һалынған. Бында пландағы 6600 урынына барлығы 5562 центнер йәшел масса әҙерләнгән. Һәр гектарҙан 129-ар центнер алынған.

Мал аҙығы әҙерләүсе механизаторҙар Латиф Айҙашев, Геннадий Рогалев, Рәшит Ҡоҙабаев, Мирсәит Таһировтар, совхоз шоферҙары Анатолий Лазарев, Әхәт Аҡҡужин, шулай уҡ Стәрлетамаҡ ҡалаһынан килгән шоферҙар Евгений Двинякин, Владимир Фризин, Радик Алтынбаев, Валерий Фәйзрахмановтарҙың тырыш хеҙмәте һөҙөмтәһендә силос культураларын тиҙ һәм сифатлы итеп йыйып алырға мөмкинселек булды, улар смена заданиеларын 150—200 процентҡа үтәй.

Совхоздың мал аҙығы әҙерләүселәре йәмәғәт малдарын туҡ ҡышлатыу өсөн силос культураларын йыйыуҙы тиҙ һәм сифатлы тамамларға тырыша.

Г. АБДУЛЛИН,
ауыл хәбәрсеһе.

Уңыштың нигеҙе—тырышлыҡта

Фрунзе исемендәге колхоздың мал аҙығы әҙерләүселәре силос культураларын йыйыуҙы тамамланы. 500 гектар майҙандың һәр гектарының уртаса төшөм 135 центнер тәшкил итте, бөтәһе 7000 тонна силос массаһы әҙерләнде. Сабыуҙа механизаторҙар Рафаил Байғусҡаров менән Анатолий Байрамаловтар айырыуса һәйбәт эшләне. Улар һуңғы биш көнлөктә нормалағы 300 урынына 725 һәм 599 центнер һутлы аҙыҡты траншеяларға оҙатты.

Фәрит Байғусҡаров, Зәйнетдин Бохарбаев һәм Ғафүр Мәмбәтовтар баҫыуҙан силос массаһы ташыуҙа смена заданиеларын көн һайын арттырып үтәне.

Зәйнетдин Яманғолов менән Азамат Нураев гусеницалы тракторҙары менән силос траншеяһындағы массаны яҡшылап тапатты.

Малдар өсөн һалам әҙерләү эштәре лә яҡшы алып барыла. Бында тейәүсе Ислам Ишкилдин, кәбән ҡойоусы Айҙар Байрамғолов һәм ташыуҙа эшләүсе Фәкил Әлмөхәмәтов намыҫлы хеҙмәт өлгөһө күрһәтә. Бөгөнгә көндә 750 гектар майҙан һаламдан таҙартылды, уның 150 тоннаһы аҙыҡ ихатаһына ташылды, 260 тоннаһы баҫыуҙар янында эҫкертләнде.

Колхозда туңға һөрөүҙә уңышлы бара. Был эш бөтәһе 350 гектар майҙанда башҡарылған. Бында механизатор Рафиҡ Юлдашбаев смена нормаһын 139 процентҡа үтәй.

Ф. СОЛТАНҒУЖИН,
Фрунзе исемендәге колхоздың партбюро секретары.

Район хужалыҡтарында йәшел массаны силосҡа һалыу тамамлана. Был эште «Красный доброволец», «Һаҡмар» колхоздарында, «Аҡъяр», «Степной» совхоздарында юғары темп менән алып барҙылар, хәҙер һуңғы гектарҙағы культуралар сабыла.

«Һаҡмар» колхозы мал аҙығы әҙерләүселәре пландағы 6000 урынына 15999 тоннанан ашыу йәшел массаны силосҡа һалып, малдарҙы һутлы аҙыҡ менән тәьмин итте.

Силос һалыуҙы яҡын көндәрҙә тамамлау — ауыл эшсәндәренең төп бурысы.

ҺҮРӘТТӘ: Салауат исемендәге колхозда кукуруз сабалар.

Р. БАЙМУРЗИН фотоһы.

Колхоз-совхоздарҙа августың өсөнсө ун көнлөгөндә һауылған һөт

Хужалыҡтар һәм фермалар	Һәр һыйырҙан уртаса һауым (кг): III ун көнлөктә	1986 й. ҡарата +, –	Августың 30 көнөндә	1986 й. ҡарата +, –
Колхоздар:				
Фрунзе исем.:	94	–	8,7	+0,4
«Новый путь»:				
Ергән	91	– 6	8,9	+0,3
Иләс	89	– 2	7,78	–0,6
«Кр. доброволец»:				
Әбүбәкир	108	–15	9,0	–0.8
Калинин исем.:				
Байғусҡар	71	– 2	6,9	+0,6
Переволочан	59	– 1	5,2	–0,4
«Красное знамя»:				
Атинган	59	–10	5,3	–1,5
Йәнтеш	67	– 8	6,0	–0,4
Ленин исем.:				
Ивановка	66	– 9	5,8	–0,8
Михайловка	78	+ 7	8,2	+1,1
Пугачевка	54	– 8	6,6	+0,5
Аҡташ	66	+ 2	7,8	+1,6
«Һаҡмар»:				
Әбеш	52	–14	5,3	–0,6
Б. Арыҫланғол	100	+31	10	+3,5
Ҙ. Арыҫланғол	71	–11	6,9	–0,5
Һ. Наҙарғол	65	+ 6	5,0	+0,6
Үрнәк	83	+11	6,3	–0,6
Салауат исем.:				
Ғәлиәхмәт	63	+11	5,4	+1
Аҡназар	90	+30	6,9	+2
Аҡъюл	47	–11	4,2	–0,6
Урыҫбай	64	– 2	5,8	–0,1
Совхоздар:				
«Аҡъяр»:				
Татыр-Үҙәк	112	–	11,3	+0,7
Яковлевка	75	–22	7,3	–0,7
Быҙаулыҡ	102	+ 6	8,5	+0.5
Юлбарыҫ	90	– 2	8,3	–0,1
Хворостянка	69	–10	5,8	–1,3
«Таналыҡ»:				
Подольск	105	+15	8,7	+0,1
Бакаловка	75	–	6,0	–1,2
Әҙел	82	–12	6,4	–2,3
Савельевка	117	+11	10,4	–0,2
Таштуғай	111	+ 3	9,7	–0,3
Новоукраинка	129	–	10,1	–2,0
«Хәйбулла»:				
Целинный	74	– 9	6,2	–1,5
Хоҙайбирҙин	86	– 7	7,8	–0,2
Комсомол	131	+22	11,8	+3
«Маҡан»:				
Маҡан	130	+30	11,1	+2,2
Воздвиженка	99	+ 9	8,6	+0,5
Мәмбәт	111	+ 5	10,6	+2,5
Сәғит	68	– 8	6,0	–0,6
«Матрай»:				
Уфимск	83	– 5	7,0	–0,3
Новопетровка	89	+ 1	8,2	+0,9
Һарыҡул	80	+ 2	6,9	—
«Степной»	96	+11	8,9	+1,3
Район буйынса:	86	–	7,7	+0,2

Малсылыҡта юғары продукция алыу өсөн иң уңайлы—малдарҙы йәйге көтөүлектәрҙә ашатыу осоро тамамланып килә. Ләкин районның ҡайһы бер һөтсөлөк фермаларында күп һөт алыу мәле тулыһынса файҙаланылманы. Шуға күрә әҙ тотоноуҙар менән арзан продукция алыу буйынса билдәләнгән кимәлгә өлгәшә алманылар.

Шулай ҙа ҡайһы бер ыңғай яҡтарҙы билдәләп үтергә кәрәк. Район колхоздары һәм совхоздары йыл башынан 197544 центнер һөт етештерҙе, был уҙған йылдың ошо уҡ осоро менән сағыштырғанда 12832 центнерға күберәк. Һәр һыйырҙан 1982-шәр килограмм, йәки 84 килограмға күберәк һөт алынған. Бындай һөҙөмтәләргә тик йәйге көтөүлектәрҙе файҙаланып ҡына өлгәшелде.

Хәҙерге ваҡытта һауым ҡырҡа кәмей. Быларҙың үҙ сәбәптәре бар, әлбиттә. Бөгөнгө көндә ҡайһы бер хужалыҡтар уртаса район күрһәткесенән күпкә кәм һөт һауып ала. Улар: Калинин исемендәге, «Красное знамя», Салауат исемендәге колхоздар, Ленин исемендәге колхоздың Ивановка һәм Пугачевка фермалары, «Һаҡмар» колхозының Әбеш һәм Һаҡмар-Наҙарғол, «Аҡъяр» совхозының Яковлевка һәм Хворостянка, «Таналыҡ» совхозының Бакаловка һәм Әҙел, «Хәйбулла» совхозының Целинный, «Маҡан» совхозының Сәғит, «Матрай» совхозының Һарыҡул фермалары һәм башҡалар.

Бигерәк тә, Салауат исемендәге колхоз малсылары артта ҡала. Хужалыҡта уҙған йылдың ошо уҡ осоро менән сағыштырғанда тулайым һауым 884 центнер, һәр һыйырҙан һауым 231 килограмға кәмене. Быны күреп тә, колхоздың зоотехния службаһы тейешле саралар күрмәй. Тик ошо хужалыҡта ғына шундай хәл килеп тыуған.

Бер үк хужалыҡтың фермаларында күрһәткестәр төрлөсә. Был малсыларҙың үҙ эштәренә булған ҡарашы тураһында һөйләй. Бөтә фермаларҙа ла малдарҙы өҫтәмә йәшел аҙыҡ менән туҡландырыу ойошторолмаған. Көтөүлектәр ярлыланды, шулай булғас, бындай сара бик ваҡытлы булыр ине, уны ойоштороу өсөн бөтә урында ла мөмкинлектәр бар. Ҡышҡы рационға күсеү тураһында ла уйларға ваҡыт.

Етештерелгән һөттөң сифаты һаман да түбән әле. Хужалыҡ етәкселәре һәм белгестәре бының производствоның экономик үҫешенә нисек йоғонто яһауы тураһында тейешле һығымта яһамағандар, күрәһең.

Ашламаларға иғтибар етешмәй

Хужаһыҙлыҡ адресы

Район хужалыҡтарына минераль ашламалар, башҡа төрлө химик продукциялар ташыу күләме арта бара һәм игенселәрҙән уларҙы һаҡлауға хөстәрле ҡараш талап ителә. Тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, химик продукцияларҙы һаҡлау, ташыу һәм ҡулланыу эштәренең ҡәнәғәтләнерлек түгел икәнлеге асыҡланды. Һөҙөмтәлә уларҙың сифаты насарая һәм юғалтыуҙарға юл ҡуйыла.

Күпселек колхоздарҙа һәм совхоздарҙа минераль ашламаларҙы иҫәпкә алыу тейешле кимәлдә түгел. Уларҙы үлсәмәйенсә тотоналар, ҡайһы бер хужалыҡтарҙа яуаплы кешеләр билдәләнмәгән. Ашламалар списать ителә һәм улар файҙаланылған тип накладнойҙар төҙөлөп, отчет тапшырыла, ә фактик ауырлығы, уны һаҡлағанда һәм ташығандағы юғалтыуҙар иҫәпкә алынмай. Быны менән хужаһыҙлыҡ сәбәптәре йәшерелеп ҡала. «Һаҡмар», «Красный доброволец» колхоздарында шундай факттар асыҡланды.

Хужалыҡҡа сәсеү тамамланғандан һуң килтерелгән ашламалар килеһе яҙға тиклем файҙаланылмай, һөҙөмтәлә уларҙың физик һәм химик үҙенсәлектәре насарая. Бөгөнгө көндә районда ашламаларҙың яртыһы тиерлек асыҡ һауала һаҡлана. Ашламаларҙы боҙоуға юл ҡуйған өсөн яуаға тарттырмау һөҙөмтәһендә, ҡайһы бер хужалыҡтарҙа, складтар була тороп та, уларҙы асыҡ һауала һаҡлайҙар. Мәҫәлән, «Красное знамя» колхозында 15 тонна ҡиммәтле бөртөклө фосфорлы ашлама, сифатын юғалтып, ямғыр аҫтында ята. Унан алыҫ түгел ерҙә колхоз тракторҙары туңға һөрә, хужаларса мөнәсәбәт булғанда, был ашламаларҙы шунда уҡ тупраҡҡа индерергә мөмкин бит. Ашламалар һаҡлау урыны еүеш, ҡыш уҡ килтерелгән азотлы ашламалар дымлы килеш, ташландыҡ хәлдә ята, склад территорияһындағы бушаған ашлама тоҡтары йыйып алынмаған.

Булған склад биналарын ремонтларға кәрәк. Уның ҡапҡаһы, тәҙрә быялалары юҡ, түбәһенән һыу ағып тора. Склад мөдире В. И. Волжаниндың быға хуш күңелле һәм яуапһыҙ ҡарашы ғәжәпләндерә.

Башҡа хужалыҡтарҙа ла ашламаларға ҡарата тейешле иғтибар биреп еткерелмәй. Склад мөдирҙәренә, шулай уҡ хужалыҡ етәкселәренә «Маҡан» совхозының Үҙәк һәм «Таналыҡ» совхозының Савельевка бүлексәләре эшсәндәренән ашламаларҙы һаҡлау буйынса өлгө алырға кәрәк.

Ленин исемендәге колхоз коллективы минераль ашламалар ҡулланыу буйынса хаҡлы рәүештә беренсе, ә уны һаҡлау буйынса, киреһенсә, һуңғы урында тора. Складтарҙың береһе «иҫкергән», икенсеһе төҙөп бөтөлмәгән. Уларҙың икеһенән бына тигән бер склад төҙөп ҡуйырға ваҡыт түгелме?

Ҡайһы бер хужалыҡтарҙа склад биналары тупраҡты төп эшкәртеү ваҡытында файҙаланылырға тейешле фосфор ашламаларынан бушатылмаған. Һөҙөмтәлә хужалыҡтар, урын юҡлыҡтан, ашламаларҙың ҡышҡы фондын ҡабул итә алмай, шуға күрә «Агропромхимия» район берекмәһе автомашиналарының эше лә тотҡарлана.

Химик средстволар күпләп ҡулланыла башлаған 1964 йылдың статистик мәғлүмәттәренә ҡарағанда, район 4700 тонна минераль ашлама алған, ә үткән биш йыллыҡта беҙ бөтәһе 18 мең тоннанан ашыу ашлама ҡулландыҡ. Район хужалыҡтары ашламаларҙы 4,5 тапҡырҙан күберәк файҙаланһа ла, культураларҙың уңдырышлылығы һиҙелерлек артманы. Ашламаларҙың ҡулланғанға тиклем үк боҙолоуы, уларҙың эффектлылығының түбән булыуына ла сәбәп булып тора.

Әлегә беҙ, фосфорлы ашламалар етешмәгәнлектән, уны тулы нормала файҙалана алмайбыҙ, уны дөрөҫ һәм ваҡытында ҡулланыуҙа ла етди кәмселектәр бар. Химик средстволарҙы баҫыуҙарҙы комплекслы агрохимик эшкәртеү программаһы буйынса ҡулланыу тейешле кимәлгә ҡуйылмаған.

Урып йыйыу эштәре тамамланыуға күп ҡалманы. Хужалыҡтарҙың агрономик службалары минераль ашламаларҙы һаҡлау һәм ҡулланыу буйынса аныҡ пландар билдәләргә тейеш. Уларҙы һаҡлау өсөн складтарҙың етешмәүе арҡаһында ерҙе төп эшкәртеү ваҡытында фосфор ашламаларының 75 проценты, калийлы ашламалар тулыһынса файҙаланылырға тейеш. Уларҙы беренсе сиратта килһе йылда культуралар интенсив технология буйынса сәселәсәк пар һәм башҡа баҫыуҙарға индерергә кәрәк. Ашламалар һаҡлау урындарын ремонтлауҙы ла онотоғра ярамай.

РАПО приказы менән төҙөлгән комиссия тарафынан сентябрь—октябрҙә районда минераль ашламаларҙың нисек һаҡланыуы тикшереләсәк. Шуға күрә беҙ дөйөм көс менән ауыл хужалығы культураларының уңдырышлылығын күтәреүҙә мөһим резервтарҙың береһе булып иҫәпләнгән минераль ашламаларҙы һаҡлау һәм файҙаланыу эшендә булған кәмселектәрҙе бөтөрөргә тейешбеҙ.

Р. ҠАШҠАРОВ,
район агрохимигы.

Тыныслыҡ көнө

1-се һанлы Аҡъяр урта мәктәбендә беренсе сентябрҙең тантаналы линейкаһын кластан тыш эштәрҙе ойоштороусы Р. Ш. Вәлиев асты. Советтар Союзы Гимны яңғыраны. Уҡыу отличниктары һигеҙенсе класс уҡыусылары Нәзирә Юлдашбаева һәм Гөлназ Нурaева Дәүләт флагын күтәрҙе.

Уҡыу йылы башланыу айҡанлы һәм Белем байрамы, Бөтә донъя тыныслыҡ көнө менән ҡотлап, мәктәп директоры Р. Ғ. Насиров, район халыҡ мәғариф бүлеге мөдире Т. Һ. Илемьәтова, Фрунзе исемендәге колхоздың партия ойошмаһы секретары Ф. Ғ. Солтанғужин, һуғыш һәм хеҙмәт ветерандары Ш. М. Таулыҡаев, Р. С. Нурaевалар, район Советы башҡарма комитеты председателе урынбаҫары Ш. М. Байғуҫҡаров, БАССР мәктәптәренең атҡаҙанған уҡытыусыһы Ғ. Ғ. Мөхәмәтовалар сығыш яһаны. Уларҙың сығыштары Тыныслыҡ, Азатлыҡ һәм Хеҙмәт темаһына арналды.

Беренсе һәм 10-сы класс уҡыусылары үҙ-ара ҡотланыштар һәм бүләктәр тапшырҙылар. Балалар шиғырҙар һөйләне, унда партиябыҙға һәм хөкүмәтебеҙгә балалар тураһында хәстәрлек күргәндәре, уҡыуға хоҡуҡ биргәндәре өсөн рәхмәт яңғыраны. Һуңынан совет мәктәптәрендә традицияға әүерелгән Тыныслыҡ дәрестәре булды. Ул һәр класта ла юғары кимәлдә, тулҡынландырғыс үтте. Тыныслыҡ һәр кемгә лә кәрәк. Дәрестән һуң уҡыусылар һуғышта һәләк булған яҡташтарыбыҙҙың һәйкәленә сәскәләр һалды. Был көндө балалар киҫкен политик йүнәлештәге «Килешеү» («Сделка») фильмын ҙур ҡыҙыҡһыныу менән ҡараны.

Ләкин тыныслыҡ көнөндә илебеҙҙе фашист илбаҫарҙарынан ҡотҡарыуҙа ҡатнашыусыларға иғтибар бирмәү мөмкин түгел. Тимурсылар был көндө үҙҙәре шефлыҡҡа алған һуғыш һәм хеҙмәт ветерандарына ярҙам итеүҙе үҙҙәренең бурысы итеп һананы. Улар оло кешеләргә өй эштәре буйынса ғына ярҙам итеп ҡалманылар, Бөйөк Ватан һуғышы тарихы ваҡиғаларын тыңлап, ысын күңелдән һөйләшеп, улар менән бергә Совет иленең данлы юлдарын хәтергә төшөрҙөләр. Сөнки Белем һәм Тыныслыҡ көнө Бөйөк Октябрҙең юбилей йылында уҙа. Тиҙҙән илебеҙ халҡы был байрамды тантаналы үткәрәсәк. Балалар ҙа уны тырыш уҡыуҙы, файҙалы эштәре менән лайыҡлы ҡаршыларға әҙерләнә.

Ә. БОХАРЬАЕВА,
1-се Аҡъяр урта мәктәбе уҡытыусыһы.

Һаумы, мәктәп!

ҺҮРӘТТӘРҘӘ: Илдар Ғәлин өсөн был 1 сентябрь һуңғы булһа — ошо уҡыу йылында ул мәктәпте тамамлай, Гөлнара Юлдашбаева өсөн мәктәп ҡыңғырауы беренсе тапҡыр шылтырай; 6 йәштәгеләрҙең уҡыуы тыныслыҡ дәресенән башланды.

Р. БАЙМУРЗИН фотоһы.

Көтөп алынған ваҡиға

Садовый поселогында иртәнән алып йәнлелек һиҙелә. Мәктәп формалары кейгән, ҡулдарына сәскәләр һәм портфель тотҡан балалар ата-әсәләре менән бергә мәктәпкә ашыға. Бында музыка яңғырай, төрлө төҫтәге флажоктар елдә елберҙәй, мәктәп ишеге өҫтөнә эленгән традицион вывеска «Рәхим итегеҙ!» балаларҙы «белем иленә» саҡыра. Балалары өсөн шатланып күп кенә атайҙар эш кейеме менән үк бөгөнгө байрамды ҡарарға килгәндәр, сөнки ремтехпредприятие мәктәпкә яҡын ғына урынлашҡан.

Уҡытыу бүлеге мөдире В. М. Ефимова тантаналы линейканы асты. Иң яҡшы уҡыусыларҙың береһе Мәрғиә Ишкилдинаға Дәүләт флагын күтәреү хоҡуғы бирелә. Советтар Союзы Гимны яңғырай.

Балаларҙы һәм ата-әсәләрҙе яңы уҡыу йылы башланыу, Белем байрамы һәм һигеҙ йыллыҡ мәктәптең асылыуы менән ҡотлап, мәктәп директоры У. М. Байдәүләтов, комсомол райкомының икенсе секретары Н. Ә. Дилмөхәмәтова, һуғыш һәм хеҙмәт ветераны С. Ғ. Ҡунаҡбаев, РАПО-ның ремпредприятиеһы парторгы Ә. И. Дәүләтбирҙин, ата-әсәләр исеменән Т. П. Горшкова, З. У. Ишпановалар сығыш яһаны.

Үҙ инициативаһы менән ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә Садовый һигеҙ йыллыҡ мәктәбен яңы уҡыу йылына әҙерләп өлгөрткән уҡытыусылар һәм ремтехпредприятие администрацияһына күп кенә рәхмәт һүҙҙәре әйтелде. Ата-әсәләрҙең ҡыуанысын аңларға була: уларҙың балалары ситкә йөрөп уҡыуҙан ҡотолдо. Балаларҙың дәрестән тыш ваҡытын ойоштороу өсөн мөмкинлектәр күберәк булыр, мәктәп менән ғаилә һәм база предприятиеһы араһындағы бәйләнеш тә нығыныр.

Бөгөн Садовый һигеҙ йыллыҡ мәктәбенә 116 бала килде. Йәш һәм һәләтле 13 педагог уларға белем бирәсәк. Коллектив ҙур түгел. Ләкин улар дуҫлашып та өлгөргән. Отпускыла булыуҙарына ҡарамаҫтан, был уҡытыусыларҙың күбеһе ата-әсәләр менән бергә мәктәпте яңы уҡыу йылына әҙерләүҙә ҡатнашты.

Тәүге сығарылыш класы — 8-се класс уҡыусылары, белем эстафетаһын ҡабул итеүсе 1-се класс уҡыусыларына арнап, Тыныслыҡ, Ватан һәм мәктәп тураһында шиғырҙар һөйләне һәм йырҙар йырланы. Балалар бер-береһенә оҡшаш та, оҡшамаған да кеүек... Бына берәүҙең улы — бер йәй эсендә арыуыҡ ҡына ҙурайған һәм мыҡтыланған, класташтары араһында етдилеге менән айырылып тора, уҡытыусыларға һәм мәктәп директорына ентекле ҡарай. Яңы уҡыу йылында күпме ҡыҙыҡлы эштәр буласаҡ. Ул яңы класта үҙенең дуҫы менән бергә ултырыу өсөн парта һайлап та ҡуйған.

Бына 1-се класс уҡыусыһы Настя Куринова линейкала ҡатнашыусылар янынан мәктәп ҡыңғырауын шылтыратып үтте. Быйылғы тәүге тантаналы линейка йыр менән тамамланды. Өлкәндәр үҙ эшенә ашыға, ә балалар беренсе тапҡыр яңы класҡа инә.

Тыныслыҡ дәресе.Ситил телдәре уҡытыусыһы Светлана Рәүфовна Әғләтдинова уны 7-се класта үткәрә. Бүлмә таҙа, әле буяу еҫе сығып тора. Балалар уҡытыусылары менән бер нисә стенд эшләргә өлгөргән, шуның өсөн класс та һөйкөмлө. Ә хәҙер балалар бик етди ултыра. Дәрес бара. Бала саҡтан уҡ таныш булған юлбашсыбыҙ Ленин һүрәтенә ҡарайҙар. Тыныслыҡты символлаусы плакат та бар бында.

Уҡытыусы балалар менән бергә Хиросима һәм Нагасаки фажиғәһен хәтерләйҙәр. Ул уларға япон ҡатынының ҡайғыһы тураһында һөйләй. Был әсәнең ҡыҙы тере ҡалыу өсөн 300 ҡағыҙ торна эшләргә хыялланған, ләкин өлгөрмәгән. Бәләкәй ҡыҙын иҫкә алып, ул йыл һайын иҫтәлектәр паркындағы һыу ятҡылығына төрлө төҫтәге фонариктар (карапттар) ебәрә икән.

Шиғырҙары һәм йырҙары менән тыныслыҡ өсөн көрәшеүсе Дин Рид, Виктор Харра кеүек кешеләрҙе хәтерләнеләр. Шулай уҡ Ялтанан совет уҡыусыһы Нина Турбина һәм башҡаларҙың бөтә кешеләрҙе тыныслыҡ өсөн көрәшкә саҡырыуҙары тураһында ла һүҙ булды.

Уҡыусылар мәктәптә, пионер лагерҙарында һәм ауылда тыныслыҡ яҡлап ниндәй саралар үткәреләүен һанап сыҡтылар. Һуңынан балалар һүрәт төшерҙе. Улар үҙҙәренең тормошондағы иң ҡәҙерле нимәне эшләне.

Һуңынан класта башҡа дәрестәр үткәрелде. Уҡытыусылар бүлмәһенә тиклем балаларҙың тауышы ишетелеп торҙо: улар мәктәп тормошон ҡыҙыҡлыраҡ алып барыу өсөн план ҡорҙолар. Ә дәрестән һуң уҡытыусылар үҙ-ара етешһеҙлектәрҙе һәм проблемаларҙы тикшерҙе. Пионер вожатыйы кәрәк. Пионер һәм комсомол бүлмәләрен нисек биҙәргә. Музыка етәксеһен ҡайҙан табырға. Комсомол эшен нисек төҙәргә. Шефтар менән бәйләнеш булдырырға, уҡыусылар менән индивидуаль эште йәнләндерергә кәрәк. Уҡыусыларҙы ашатыу проблемаһын да хәл итеү талап ителә. Нисек итеп кластарҙы йыһазландырырға, бөтәһе лә эшләнмәгән әле. Проблемалар күп, ләкин был йәш педколлективтың инициативаһы һәм эшләргә ҙур теләге бар.

Р. СОЛТАНГИЛДИНА.

Тәүге ҡыңғырау

Ҡулдарына сәскә бәйләмдәре тотҡан, байрамса кейенгән уҡыусылар, уҡытыусылар һәм, әлбиттә, ата-әсәләр ҙур байрамға — Белем көнөнә ашыға.

2-се һанлы Аҡъяр урта мәктәбе комсоргы Г. Усенова мәктәп директорына мәктәптең яңы уҡыу йылына әҙерлеге тураһында рапорт бирә. Советтар Союзы Гимны яңғырай. Уҡыу отличниктары, 10-сы кластан комсомолец И. Овчинников менән 6-сы кластан А. Фәтхуллин Совет Социалистик Республикалар Союзы флагын күтәрә. Мәктәп директоры С. М. Байғабулов, КПСС райкомы һәм райсовет вәкиле Л. Н. Симонова, Фрунзе исемендәге колхоздың баш экономисы Б. И. Дәүләтбаев, 110-сы СПТУ-һының производствоға өйрәтеү мастеры М. Ғ. Дәүләтбаева, райпо председателе Н. Л. Никифоровтар ҡотлау һүҙҙәре менән сығыш яһаны. Йәйге каникул осоронда производствола, йәмәғәт малдары өсөн мал аҙығы әҙерләүҙә ярҙам күрһәтеүселәргә Почет грамоталары һәм бүләктәр тапшырылды. «Чебурашка» балалар баҡсаһында тәрбиәләнеүселәр ҙә үҙҙәренең ағайҙарын һәм апайҙарын ҡотларға килгән.

Өлкән класс уҡыусылары мәктәпкә тәү тапҡыр килеүсе кескәйҙәргә — 1-се класс уҡыусыларына «Белем донъяһына аҫҡыс» менән ҡотлау открыткалары тапшырҙы. Һәм бына И. Овчинников менән 1-се класс уҡыусыһы Д. Иәноҙаҡоваларҙың ҡулында уҡыусыларҙы һәм уҡытыусыларҙы белем донъяһына саҡырып тәүге ҡыңғырау шылтырай.

Уңыш юлдаш булһын, һеҙгә!

М. АКИЛОВА.

Үҫмерҙәр сәләмәт булһын

Халыҡ депутаттары район Советы башҡарма комитетының ҡарары менән йыл һайын сентябрь һәм октябрь айҙарында призывҡа тиклемге һәм призыв йәшендәге үҫмерҙәрҙең һаулығы тикшерелә, йәки уларҙы дауалау (диспансерлаштырыу) үткәрелә.

Был мөһим сара иҫәбенә түбәндәгеләр инә:

— ауырыуҙарҙы, физик һәм психик үҫештәге үҙгәрештәрҙе иртәрәк асыҡлау;

— үҫмерҙәрҙең һаулығын врачтар тарафынан даими күҙәтеү, шулай уҡ уларҙың тештәрен, күҙҙәрен дауалау;

— хеҙмәт һәм көнкүреш шарттарын өйрәнеү.

Врач-белгестәрҙең даими күҙәтеүе диспансерлаштырыуҙың төп элементы булып тора.

Сәләмәт йәки ауырыуы булған бөтә йәш үҫмерҙәр ҙә (14 йәштән алып 18 йәшкә тиклем) диспансерлаштырылырға тейеш.

Быйыл Аҡъяр үҙәк больницаһында 1971—1973 йылда тыуған йәш үҫмерҙәр медицина тикшереүе үтәсәк.

Физик яҡтан етешһеҙлектәр йәки ауырыу тапҡан осраҡта улар диспансер иҫәбенә алына, дауалау курсы билдәләнә.

Призывҡа тиклемге һәм призыв йәшендәге үҫмерҙәр араһында был эште үткәреү һаулыҡ һаҡлау органдарына тапшырылған. Улар хәрби комиссариат менән берлектә дауалау-һаулыҡ һаҡлау эштәре планын төҙөй. Үҫмерҙәр һәм призыв йәшендәге егеттәр араһында дауалау-һаулыҡ һаҡлау һәм профилактик эштәре менән ойоштороу-методик етәкселек итеү район больницаһының үҫмерҙәр службаһына йөкмәтелә.

Үҫмерҙәрҙе диспансерлаштырыуҙың уңышы уларҙың үҙ ваҡытында килеүен тәьмин иткән хужалыҡ, предприятие, мәктәп етәкселәренең ярҙамына бәйләнгән. Ауыл Советтары башҡарма комитеттары үҫмерҙәрҙең, уҡыусы һәм эшсе йәштәрҙең аныҡ исемлеген төҙөргә тейеш һәм график буйынса район үҙәге больницаһына ебәрергә бурыслы.

Йәштәрҙе үҙ ваҡытында диспансерлаштырыу һәм уларҙы һауыҡтырыу Совет Армияһы сафында хеҙмәт итеүгә әҙерләүҙә, илебеҙҙең оборона ҡеүәтен нығытыуҙа ҙур роль уйнай. Был мәсьәләгә партия һәм совет органдары, ата-әсәләр һәм бөтә йәмәғәтселек яғынан етди иғтибар бүленергә тейеш.

И. БАЙҒАБУЛОВА,
Аҡъяр больницаһының үҫмерҙәр службаһы фельдшеры.

Редакторы Б. Ғ. НАЗАРҒОЛОВ.

БЕҘҘЕҢ АДРЕС: Аҡъяр ауылы, Сиҙәм проспекты, 37.

Телефондар: редактор—2-11-95, редактор урынбаҫары, яуаплы секретарь—2-15-95, партбүлек—2-13-97, ауыл хужалығы бүлеге һәм радиохәбәрсе—2-14-95, хаттар бүлеге—2-13-95, фотохәбәрсе—2-14-98, типография директоры—2-15-62, цех—2-14-87.

Газета аҙнаһына өс тапҡыр: шишәмбе, кесаҙна, шәмбе көндәрендә башҡорт һәм рус телдәрендә сыға.

Орган Хайбуллинского райкома КПСС и районного Совета народных депутатов БАССР.

Башҡорт АССР-ы Нәшриәт, полиграфия һәм китап сауҙаһы эштәре буйынса дәүләт комитетының Хәйбулла район типографияһы. Тираж 2646. Заказ № 923.